БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ҠЫРМЫҪҠАЛЫ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН МАЛАЙ АУЫЛЫНЫҢ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ МӘКТӘБЕ
МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ ТӨП ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

«Ҡаралған»
ММБ етәксеһе
Ғәйфуллина М.Р.
1-се протокол
01 август 2023 йыл

«Раҫлайым»
Мәктәп директоры
Ғәйфуллин Г.Й.
Бойороҡ №ы 135
«30» август 2023 йыл

# Туған (башҡорт) теле әҙәби уҡыуҙан 1-4 класс өсөн эш программаһы

Дәреслек авторҙары:

1. " Туған тел" 1 класс Ф.Ш.Сынбулатова ,С.В.Атанголова,С.Г.Кәримов
2. "Әҙәби уҡыу" 2 класс Ф.Ш.Сынбулатова,М.С.Дәүләтшина
3. "Әҙәби уҡыу "3 класс Ф.Ш.Сынбулатова,Ә.Т.Мәүлиәрова
4. "Туған тел" 4 класс Ф.Ш.Сынбулатова,М.С.Дәүләтшина

**Төҙөүсеһе : Йәлилова Ләйсән Өлфәт ҡыҙы**
**1 категориялы уҡытыусы**

**Малай ауылы –2023 йыл**

## Аңлатма яҙыу

Башҡортостан Республикаһы Ҡырмыҫҡалы районы Малай мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 1-4-се кластары өсөн туған (башҡорт) теленән эш программаһы федераль һәм республика закондары, норматив документтарына таянып төҙөлдө: • Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68 статьяһы (п.3) Рәсәй Федерацияһында “…унығ бөтә халыҡтарына туған телен һаҡлау, уны өйрәнеүгә һәм үҫтереүгә шарттар тыуҙырыу хоҡуғы” гарантиялай.

• Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 54 статьяһы “Башҡортостан Республикаһы үҙ территорияһында йәшәгән халыҡтарға туған телдәрен һаҡларға тиң хоҡуҡтар гарантиялай, уны ирекле өйрәнергә һәм үҫтерергә мөмкинлектәр тыуҙыра”.

• Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән №273-ФЗ “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Федераль Законының 14 статьяһына (п.1, 4) ярашлы һәр кемгә мәғариф системаһы биргән мөмкинлектәрҙән сығып туған телендә белем алыу хоҡуғы гарантиялана.

• “Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында” Рәсәй Федерацияһы Законының 9 статьяһына (п.1-5) ярашлы Рәсәй Федрацияһы граждандары тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. Ошо уҡ закондың 10 статьяһына ярашлы туған телендә белем алырға теләүселәргә дәүләт һәм мәғариф ойошмалары бөтә шарттар тыуҙырырға бурыслы.

• Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з “Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында”ғы Законының 6 статьяһына (п.3) ярашлы Башҡортостан Республикаһында һәр кем дәүләт аккредитация үткән мәғариф программалары нигеҙендә Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы туған телендә белем алырға хоҡуҡлы. Бының өсөн дәүләт шаттар тыуҙырырға бурыслы.

• “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында” Башҡортостан Республикаһы Законының 8 статьяһына (п.1-5) ярашлы һәр кем тәрбиә һәм белем алыу телен һайлау хоҡуғына эйә. 9 статьяһында (п.1) дәүләттең туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн шарттар тыуҙырыу бурысы билдәләнә.

• Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының 2009 йылдың 6 октябренән №373 бойороғо менән раҫланған Федераль дәүләт белем биреү стандарттарының 19.3 пунктына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреүҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттарына дәүләт телдәрен өйрәнеү һәм туған телдәрҙә белем биреүҙе ойоштороу мөмкинлеге бирелә.

• Башҡортостан Республикаһы Ҡырмыҫҡалы районы Малай мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының 1-4-се кластары өсөн “Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәт”енән эш программаһы федераль һәм республика закондары талаптарына ярашлы, белем йөкмәткеһен заман талаптарына тура килтереп яңыртыу, уның сифатын һәм һөҙөмтәлелеген күтәреү бурыстарын хәл итеү маҡсатында Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған “Туған (башҡорт) тел һәм әҙәбиәт” предметы буйынса белем биреү өлгө программалары/ [авт.- төҙ.:З.Ғ. Нафиҡова]. – Өфө: Китап, 2017) нигеҙендә уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4-се кластары өсөн “Туған (башҡорт) теле һәм әҙәбиәте” дәреслеген ҡулланыуға йүнәлтеп төҙөлдө.

## “Туған тел” предметын өйрәнеү һөҙөмтәләре

Башланғыс класс уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын асыҡ ҡуя.

**Шәхси үҫеш кимәле**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.Был йүнәлештә башланғыс мәктәп уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш әсен кәрәклеген аңлатырға, китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙенҫе һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итергә, тарихи- мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекерен булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә.

**Метапредмет кимәле**

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

**Предмет-ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:**

әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;

әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау (тексты өлөштәргә бүлеү, план төҙөү, тасуирлау сараларын таба белеү) һәм текстың төп фекерен асыҡлау;

үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;

тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;

йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;

аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;

төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

**Предмет кимәле**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу әлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Предметты өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре түбәндәгеләр:

компетентлы уҡыуҙы формалаштырыу;

уҡыу техникаһын үҙләштереү; *

уҡылған йәки тыңланған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;

интерпретацияның төп элементтарын үҙләштереү;

әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;

үҙенде ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;

һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;

үҙеңде ижади эшмәкәрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;

монологтар төҙөү, текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү;

һүрәтләү, хикәйәләү, хөкөмләү элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;

шиғырҙарҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

**Туған тел предметының йөкмәткеһе**

Эшпрограммаһы БашҡортостанРеспубликаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған программаға нигеҙләнеп төҙөлдө, башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандартына тура килә.

Программа етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәһе формалаштырыуға йүнәлтелгән: “Башҡорт әҙәбиәте” дәрестәрендә һүҙҙәрҙе һөйләмдә интонацион бәйләп уҡыу (ҡысҡырып уҡыу), уҡыу етеҙлеген үҫтереү (шымыраҡ уҡыуға күсеү, йыл аҙағына бышылдап уҡыу) өйрәнәләр. Етеҙ уҡыу,уҡыу техникаһын камиллаштырыу өҫтөндә системалы эш алып барыла. Һәр дәрестә текстың йөкмәткеһен үҙләштереү һәм уның төп идея тематикаһын асыҡлау өҫтөндә ентекле эш ойошторола. Бала тормош тәжрибәһенән сығып, теге йәки был хәл-ваҡиғаға, күренешкә, кешенең холоҡ-фиғеленә үҙ фекерен белдерә. Әҫәрҙәге ситуация, хәл-ваҡиғаларҙы ентекле анализлап, етди дәлилдәр килтереп, балалар дөрөҫлөктө иҫбатларға тырыша. Был осраҡта ҡыҙыу бәхәс тыуа. Бындай ситуациялар файҙалы әңгәмәләшеү,э шлекле һөйләшеүгә әйләнергә тейеш.

**1-се класта .**

Уҡыу материалы тирә-йүндәге ысынбарлыҡтың белем һәм тәрбиә биреү йәһәтенән мөһим яҡтарын үҙ эсенә ала.Баланы әҙәби һәм фәнни- популяр мәҡәләләрҙәге,әҫәрҙәге тема менән таныштыра.

1-се класс өсөн "Әҙәби уҡыу" дәреслегендә уҡыу материалы 5 бүлектә бирелә.

1-се бүлек "Мин уҡый беләм" тип атала.Был бүлектә уҡыусылар өйрәнелгән хәрефтәрҙән торған ҡыҫҡа текстарҙы һалмаҡлап уҡыйҙар.Уҡырға өйрәнеү-ҙур ҡаҙаныш, уҡый белеү-ҡыҙыҡлы шөғөл икәнен төшөнәләр.Китап уҡыуға теләк тәрбиәләнә. Китап уҡыуға ылыҡтырылалар.

2-се бүлек -"Әкиәт уҡырға яратам".

Әкиәт тураһында төшөнсә биреү.Әкиәттәрҙең күбеһендә ҡулланылған тылсымлы предметтарға иғтибар иттереү.Был предметтарҙың иң сетерекле мәлдә - көтөлмәгәндә хасил булыуҙары, геройҙы иң ауыр ситуацияларҙа ла ҡотҡарып алып ҡалыусы тылсымлы көскә эйә булыуҙарын һәм улар булышлығында әкиәттә изгелектең яуызлыҡты еңеүен күрһәтеү.

Әкиәтте тасуири уҡырға,тыңларға һәм һөйләргә өйрәтеү.Балалар яратып ҡабул иткән әкиәттәрҙе сәхнәләштереү.

3-сө бүлек-"Атай-ғаилә башлығы" ,4-се бүлек -"Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр".

Был бүлектәрҙә шиғыр, әкиәт, хикәйәләр баланы уратып алған яҡын кешеләре: атай, әсәй,картатай, ҡартәсәй, олатай, өләсәй, ағай, ҡусты, апай, һеңлеләре тураһында.Текстар ярҙамында етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләре бирә башлайбыҙ.Ошондай текстарҙың балаға тәрбиәүи йоғонтоһо ла көслө.Улар ярҙамында туғанлыҡ хистәрен тағы ла тәрәнерәк тойорға.туғандарына иғтибарлы, ағымлы, ярҙамсыл булырға өйрәтә..мәҙәниле шәхестең төп күрһәткесе,тәрбиәлелектең төп эстәлеге -туғандарыңа булған юғары мәҙәнилек.Ошоларҙы һыҙыҡ өҫтөнә алып, ентекле тәрбиәүи эш алып барылырға тейеш.

5- се бүлек " Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен үҫтереү,хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү, уның идея- тематикаһын асыҡлау, йөкмәткеһен текстҡа яҡын итеп һөйләп өйрәнеү һәм тасуири уҡыу кеүек күнекмәләрҙе формалаштырыуға ҡоролған булырға тейеш.

Баланы үҙен уратып алған тәбиғәткә иғтибарлы, күҙәтеүсән булырға,матурлыҡты тоя белергә һәм ундағы күренештәрҙе тасуирлап һөйләргә өйрәтеү.

Уҡыу техникаһы

Һалмаҡлап, ижекләп ( оҙон һүҙҙәрҙе ) һәм тулы һүҙҙәр менән дөрөҫ итеп, йыл аҙағына минутына 25-30 һүҙ уҡыу.

Текст һәм бәйләнешле телмәр өҫтөндә эш

Китап уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм системалы уҡыу күнекмәһе балыҡҡа килтереүҙур тырышлыҡ, психологик һәм педагогик оҫталыҡ талап итә.Тейешле кимәлдә

уҡыу техникаһын үҙләштергән һәм китап уҡыу күнекмәһенә эйә булған балағамәғлүмәтле булыу мөмкинлектәре асыла.бала тирә-яҡ донъяны, үҙен уратып алған мөхитте,тәбиғәт күренештәрен.хатта кеше психологияһын һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте.йәғни тормошто китап.гәзит журналдарҙан һәм башҡа заман мәғлүмәт саралары ярҙамында өйрәнә.

Программа етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәһе формалаштырыуға йүнәлтелгән: 1 -се класта туған тел дәрестәрендә һүҙҙәрҙе һөйләмдә интонацион бәйләп уҡыу (ҡысҡырып уҡыу),уҡыу етеҙлеген үҫтереү (шымыраҡ уҡыуға күсеү,йыл аҙағына бышылдап уҡыу) өйрәнәләр.Етеҙ уҡыу,уҡыу техникаһын камиллаштырыу өҫтөндә системалы эш алып барыла.Һәр дәрестә тексттың йөкмәткеһен үҙләштереү һәм уның төп идея тематикаһын асыҡлау өҫтөндә ентекле эш ойошторола.Бала тормош тәжрибәһенән сығып.теге йәки был хәл-ваҡиғаға,күренешкә,кешенең холоҡ-фиғеленә үҙ фекерен белдерә.Әҫәрҙәге ситуация, хәл-ваҡиғаларҙы ентекле анализлап, етди дәлилдәр килтереп, балалар дөрөҫлөктө иҫбатларға тырыша.Был осраҡта ҡыҙыу бәхәс тыуа.Бындай ситуациялар файҙалы әңгәмәләшеү,эшлекле һөйләшеүгә әйләнергә тейеш.

Уҡыу техникаһының иң юғары нөктәһе-тасуири уҡыу.Тасуири уҡыған уҡыусы һәр образдың эшләгән эштәрен,уй-фекерҙәрен,кисерештәрен үҙ йөрәге,күңеле аша үткәреп,хистәр тулҡынында еткереүсе булып тора.Бала дәрес аҙағына тексты тасуири уҡый алһа-был уның дәрестәге иң юғары ҡаҙанышы тип баһаларға кәрәк.

**2-се класта .**

Белем байрамы.

Көҙгө тәбиғәт, сентябрь башын һүрәтләү. Уҡыуҙың тәүге көнө, 1 сентябрь – Белем байрамы тураһында һөйләшеү. Уҡытыусыға, мәктәпкә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Тырышып белем алыу – төп маҡсат икәнен иҫкә төшөрөү.

Халыҡ ижады менән танышыу.

Уҡыйбыҙ ҙа, уйнайбыҙ ҙа...

Бишек йырҙары. Йәнлектәрҙең бишек йырҙары.

Бармаҡтар менән уйындар. Мөғжизәле бармаҡтар.

Һамаҡтар.

Йомро-йомро йомғағым, йомғағымда – йомағым.

Мәҡәлдәр – ололар һүҙе, ата – балалар кәңәше, өгөт – нәсихәте, аҡһаҡалдар васыяты.

Фәстереүҙәр (уйҙырма).

Уйындар. Шаярыуҙар.

Башҡорт халҡының ауыҙ – тел ижады ҡомартҡылар менән таныштырыу. Улар нигеҙендә етеҙ һәм аңлы уҡыу оҫталығын шымартыу. Һөйләмдәрҙе һәм тексты, таныш билдәләре ҡуйылған пауза яһап, тейешле интонация менән уҡыу. Шыбырлап , эстән уҡыуға күнегеү.

Әкиәттәр донъяһында

Әкиәтте һөйләү, уҡыу, тыңлау нескәлектәре менән танышыу. Уҡыу техникаһын камиллаштырыу. Хәл – ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле тасуирлап , ике – өс әкиәтте матур итеп һөйләргә өйрәнеү. Әкиәттән өҙөктәрҙе ролләп уҡыу, сәхнәләштереү, йәғни тасуири уҡыу.

Шиғыр уҡыу, яттан һөйләү

Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнеү, яттан һөйләү.

Уҡыусыларҙы шиғри телмәр үҙенсәлектәре менән таныштырыу. Шиғри әҫәрҙең ҡыҫҡа юлдар менән бирелешен һәм ритм, рифма, баҫым күренештәрен күҙәтеү.

Тәбиғәт күренештәре, тәбиғәт матурлығы.

Экологик мәсьәләләр.

Беҙ - тәбиғәт балалары.

Тәбиғәтте өйрәнәйек, уны һаҡлайыҡ

Етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу. Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙе тәьҫирләнеп уҡыу. Уҡыған буйынса фекер алышыу, уҡығанды тасуирлап һөйләү.

Тәбиғәт тураһындағы әҫәрҙәрҙә уҡыусыларҙың тирә-яҡ мөхит, тормош хаҡындағы белемдәрен киңәйтеү. Тәбиғәт миҙгелен һүрәтләгән әҫәрҙәрҙә тәбиғәт күренештәренең нескәлектәрен иғтибар итеү, матурлығын тоя белеү, һоҡланыу һәм тәбиғәттән алған уй-фекерҙәрҙе белгертеү, хис – тойғоларҙы тасуирлап һөйләү күнекмәләрен биреү.

Аралашыу мәҙәниәте. Кешеләр нисек аралаша?

Әҙәп төбө – ғәҙәт

Уҡылған әҫәрҙә балалар, өлкәндәр араһында булған хәл-ваҡиға, улар эшләгән эштәр, геройҙарҙың холоҡ-фиғеле, ҡылыҡтарын тураһында уйландырыу, фекер алышыу һәм баһа биреү.

Әҫәрҙәрҙәге балалар араһындағы мөнәсәбәткә күҙәтеү яһау. Ыңғай геройҙар өлгөһөндә мәҙәни аралашыу ҡағиҙәләрен үҙләштереү һәм ғәҙәти етешһеҙлектәр, насар күренештәргә ҡарата ҡарашыңда белдереү, баһа биреү, уларҙы булдырмау йәки бөтөрөү өсөн ниндәй саралар күреү тураһында уйланыу.

Беҙ хеҙмәтте, тыуған ерҙе һөйәбеҙ...

Уҡыу дәрестәрендә хеҙмәт тәрбиәһе, тыуған ил һәм тыуған төйәк , ата-бабалар ере тигән тәрән мәғәнәгә эйә булған төшөнсәләр биреү әҙәби әҫәрҙәр нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Бирелгән әҫәрҙәрҙә тыуған ергә , йәшәгән төйәккә, тирә-яҡ мөхиткә ҡарата кеше мөнәсәбәте мәсьәләләре күтәреләю . Бала дәрестә уҡыған шиғыр, әкиәт, хикәйә һәм башҡа жанрҙар аша кешенең тыуған еренә булған мөхәбәтте тырыш хеҙмәте һәм файҙалы эштәре менән билдәләүенә инана.

**3-сө класта .**

1. Әҙәби уҡыу дәреслеге менән танышыу.

Маҡсаттар: *педагогик* маҡсат – уҡыусыларҙы дәреслектең йөкмәткеһе, шартлы тамғалар системаһы менән таныштырыу. Әҙәби уҡыу дәреслегенең төҙөлөшөн белеү,шартлы тамғалар системаһын дөрөҫ ҡулланыу өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә дәреслектең йөкмәткеһендә кәрәкле бүлекте һәм әҫәрҙе эҙләп таба белеү, бүлектең йөкмәткеһен исеменә ҡарап күҙаллау,дәреслектең төҙөлөшө һәм биҙәлеше тураһында бәйләнешле телмәр төҙөү.

1.Белем байрамы.

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат –уҡыусыларҙа үҙҙәре уҡыған мәктәптең тарихы, күренекле кешеләре менән танышыу өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу, халыҡ ижадынан уҡыу, белем тураһындағы мәҡәл-әйтемдәрҙең мәғәнәләрен билдәләргә өйрәнеү.

Сафуан Әлибай. Өсөнсөгә күскәнбеҙ.

Һүҙлек: ҡотлайбыҙ –тәбрикләйбеҙ, ҙурлайбыҙ – маҡтайбыҙ – хуплайбыҙ.

Мостай Кәрим. Уҡытыусыма.

Һүҙлек: наҙлап –иркәләп – һөйөп – яратып, иҫемдә - хәтеремдә – күңелемдә.

Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар.

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат – тасуири уҡыу күнекмәһен, һүҙ байлығын үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу күнекмәһенә эйә булыу, уҡылған әҫәрҙәрҙең төп йөкмәткеһен һөйләргә һәм авторҙарын билдәләргә, мәҙәниәтле итеп бәхәс ҡорорға өйрәнеү.**(**

Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә.

Маҡсаттар:*педагогик* маҡсат – әҙәбиәт ғилеменән цитата, йәнләндереү, һүрәтләү саралары менән таныштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу, тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәтте нәфис әҙәбиәт һәм фәнни-популяр текстар аша тәрбиәләү; *уҡыусыларҙың* маҡсаты – был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә төрлө шағирҙарҙың шиғырҙарын сағыштырып уҡып, уларҙың үҙенсәлектәрен асыҡларға өйрәнеү, әҫәрҙәрҙең исемен, авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

Әҙәптең төбө – ғәҙәт

Маҡсаттар:*педагогик* маҡсат –ваҡиғаларға, геройҙарҙың ҡылыҡтарына шәхси баһа биреү, әҫәр тексын файҙаланып үҙеңдең фекереңде раҫлау өсөн шарттар тыуҙырыу, әҙәбиәт аша балаларҙа әхлаҡи ҡиммәттәр тәрбиәләү; *уҡыусыларҙың* маҡсаты – был модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә план ярҙамында тексты һөйләргә, әҫәрҙең йөкмәткеһен, төп фекерен билдәләргә өйрәнеү, проблемаларға ҡарата үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү.

Тәңкә – тәңкә ҡарҙар яуа

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат – балаларҙы һүҙ сәнғәтенә ылыҡтырыу,һөйләү телмәрен үҫтереү, әҙәби-теоретик төшөнсәләр менән әҫәрҙәрҙе анализлау аша практик таныштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә текстың исеме, иллюстрациялары менән эшләү, мәғәнәһен асыҡлау, уҡылған әҫәрҙе автор, герой һәм уҡыусы күҙлегенән анализларға өйрәнеү.

Йортом, илем, халҡым, киләсәгем

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат – Рәсәйгә, Башҡортостанға һөйөү, унын үткәне һәм бөгөнгөһөнә, күренекле шәхестәренә ҡыҙыҡһыныу, Тыуған илгә хеҙмәт итергә әҙер булыу өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә үҙеңде йәмғиәттең, халыҡтың, илдең, дәүләттең ағзаһы итеп тойоу, илдең бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн яуаплылыҡ тойғоһо кисереү, уҡылған әҫәрҙәрҙең авторҙарын билдәләргә өйрәнеү.

Әкиәт уҡырға яратам

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат – әкиәттәрҙең төҙөлөшөн, башҡа жанрҙарҙан айырмаһын, һөйләү үҙенсәлектәрен асыҡлау, текстың йөкмәткеһенә таянып әңгәмә ҡороу, уҡылғанды йомғаҡлау, тексҡа ҡарата дөйөмләштереүсе һораүҙар биреү өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты- ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә әкиәттәрҙе тасуири уҡыу, фәлсәфәүи асылын төшөнөү, өҙөктәрен дөрөҫ интонация , темп, тон менән һөйләү, сәхнәләштереү оҫталығына эйә булыу. (өҫтәргә)

Илде иңләп йәмле яҙ килә

Маҡсаттар*: педагогик* маҡсат – нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү өсөн шарттар тыуҙырыу; *уҡыусыларҙың* маҡсаты - ошо модулде үҙләштереү һөҙөмтәһендә тексты өлөштәргә үҙ аллы бүлеү, исем ҡушыу, тотош әҫәрҙең йәки һәр өлөштөң төп фекерен билдәләргә өйрәнеү.

**4-се класта** .

Һаумы, мәктәп.

1 сентябрь – Белем байрамы. Мәктәп, уҡыу, уға мөнәсәбәт тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре (ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) . Әҫәрҙең темаһы һәм төп фекере. Балаларҙа уҡыу эшенә етди ҡараш, уҡыу дәрте, ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу. Әҫәр уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу, уҡыуҙан алған тойғоларҙы, кисерештәрҙе кинәйтеү һәм тәрәнәйтеү, яҙыусынын әйтергә теләгән төп фекерен билдәләү.

Мостай Кәрим

“ Беҙҙең өйҙөң йәме” повесы буйынса. « Беҙҙең өйҙөң » повесы аша уҡыусыларҙың алдында “ ябайлыҡтың матурлығы”, “ матурҙың-ябайлығы” н асыу күҙаллана. Алты-ете йәшлек бала ауыҙынан һөйләтелгән был әҫәрҙә Бөйөк Ватан Һуғышының башҡорт

ауылдарына алып килгән ауырлыҡтарын, ир-аттар фронтҡа киткәс, ҡатын-ҡыҙҙарҙың, йәш-үҫмерҙәрҙең, ҡарттарҙың колхоздағы бөтә эште үҙ елкәләренә йөкмәп ҡалыуын, яҡындарҙы юғалтыу ҡайғыһын һәм еңеү шатлығын уҡыусыларға аңларлыҡ һәм зиһененә һеңеп ҡалырлыҡ итеп еткереү. Дәһшәтле һуғыш йылдарында илебеҙҙең халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты тағы ла нығытып, дуҫлыҡ-туғанлыҡты ябай итеп күрһәтеү. Әҫәрҙә балалар менән өлкәндәр мөнәсәбәтен күрһәтеү: оло кешеләрҙең һәр бер хәрәкәте, эш-ҡылыҡтары, үҙ-ара мөғәләмәләре, донъяға ҡараштары йәш быуынды тәрбиәләй.

Зәйнәб Биишева Балаларҙа ижтимағи тормошҡа, файҙалы хеҙмәткә ыңғай мөнәсәбәт тәрбиәләү. Уларҙың уҡыуы, уйыны, бергәләп эшләүҙәре, эҙләнеүҙәре процесында коллектив булып ойошоуҙарын иғтибар үҙәгендә тотоу. Балалар образын тыуҙырғанда, уларҙың эске донъяларына, тәрән кисерештәренә, характерҙың үҫешенә айырыуса иғтибар итеп, теләк ынтылыштарына бәйләп күрһәтеп, мәҫәл жанры менән таныштырыу. Тасуири уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

Ҡыш баһадир.

Ҡышҡы тәбиғәттең матурлығын асыу. Сағыштырыу, йәнләндереү алымдарына иғтибар итеү. Картина буйынса эш алып барыу.

Динис Бүләков

Әҫәрҙә ысын хеҙмәттең тәме, ялған һәм хаҡлы дан, ысын батырлыҡ һәм тышҡы ялтырау, тәкәбберлек һәм баҫалҡылыҡ кеүек сифаттар конкрет персонаждарҙың образдары асыла һәм халыҡтың тәжрибәләр менән һыналған тапҡыр һүҙҙәре, мәҡәлдәр менән нығытыла.

Яныбай Хамматов

“Салауат” романдарынан өҙөктәрҙе өйрәнеү үрнәгендә жанр( роман) тураһында әҙәби-теоретик төшөнсә биреү. Әҫәрҙә һүрәтләнгән тарихи осор, Башҡортостандағы ижтимағи-сәйәси хәл тураһындағы мәғлүмәттәрҙе уҡыусыларға еткереү шарт. Ваҡиғаларҙы, факттарҙы , геройҙарҙың эштәрен сағыштырыу, баһа биреү, әҫәрҙең төп фекерен табыу, һығымталар яһау- быларҙың бөтәһе тарихи материалды аңлап үҙләштерегә ярҙам итә.

Инеш әңгәмәлә геройҙарҙың кем булыуын, баларҙың улар тураһында нимәләр белеүен, ниндәй әҫәрҙәр уҡығанын асыҡлау. Әҫәрҙе уҡып һөйләтеү, план төҙөү, геройҙарға характеристика биреү, уларҙың тарихта тотҡан урынын билдәләү. Тарихи әҫәрҙәр уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Абдулһаҡ Игебаев

Поэма жанры поэзияның иң ҡатмарлы формаларынан һанала. Шуның өсөн жанрҙың үҙенсәлектәрен өйрәнеүҙе, шиғыр һәм мәҫәлдәр менән сағыштырып , 4-се класта уҡ өйрәнә башларға мөмкин.

Әҫәрҙең сюжеты лирик геройҙың уй-фекерҙәренән, кисерештәренән, һоҡланыуҙарынан тора. Һәр һүрәтләү әҫәрҙең йөкмәткеһен һәм идеяһын төрлө яҡлап аса: сағыштырыуҙар һәм йәнләндереүҙәр Урал тәбиғәтенең матурлығын, Уралдың мөһабәтлеген ҡабатлауҙан поэманың төп идеяһын тәрәнәйтеп, күҙ алдына баҫтыра.

Был жанрҙың теле ифрат үҙенсәлекле, халыҡсан. Әҫәрҙе уҡығанда тел байлығына иғтибар итергә, конкрет миҫалдарҙа күрһәтергә кәрәк.

Поэманың тексы өҫтөндәэшләгәндә түбәнге эш этаптарына иғтибар итергә: һүҙлек, фразеологик эш, уҡыусының тасуири уҡыуы һәм аңлатып биреү, әңгәмә, әҫәрҙең төп идеяһын билдәләү, уҡыусыларҙың аллы эштәрен ойоштороу.

Ноғман Мусин Кескәй уҡыусыларҙы ғаләмдең, тәбиғәттең әлегә улар өсөн сер булып ҡалған төрлө яҡтары менән таныштырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйылған рҙәр урын алған.

Әҫәрҙә тәбиғәт донъяһы менән таныштырыу кешеләрҙең шул тәбиғәткә һәм бер-береһенә мөнәсәбәтенә ҡағылған әхлаҡи проблемалар менән дә тығыҙ бәйләп алып барыла.

Хикәйәләрҙә хайуандарҙың, үҫемлектәрҙең насар бәндәләрҙән күргән йәберҙәрен уларҙың кисерештәре аша күрһәтеү балаларҙың тойғоһона тәьҫир итеү һәм тәбиғәткә һаҡсыл, мәрхәмәтле мөнәсәбәт тәрбиәләү маҡсаты ҡуйылған.

Фәрит Иҫәнғолов

Хикәйәләрҙә балаларҙың тәбиғәткә мөнәсәбәте унын ябай ғына серҙәрен асыуҙа, ҡоштарҙы, хайуандарҙы тәрбиәләүҙә күрһәтелә. Әҫәрҙә үҫмерҙәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашыуы кеүек көндәлек ваҡиғаларҙан алып, илһөйәрлек тойғоларын сағылдырыусы ситуацияларға тиклем, йәш геройҙарҙың рухи- әхлаҡи йөҙөн асыусы төрлө ваҡиғалар яҡтыртыла. Үҙ аллы уҡыу күнекмәләрен нығытыу.

Кәтибә Кинйәбулатова

Әҫәрҙәрҙә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы тыл тормошо, унда балаларҙың, үҫмерҙәрҙең яҙмышы сағылдырыла .Йәш үҫмерҙәрҙең алдарында торған бурысты дөрөҫ аңлауҙары, өҫтәренә төшкән ауырлыҡтарҙы ғорур күтәреүҙәре, киҫкен һынауҙарҙа характерҙары сынығыуы күрһәтелә.

Сафуан Әлибай

Балалар был бүлеккә ингән әҫәрҙәрҙе уҡып, уларға анализ яһап, тылсымлы ҡыш һәм алтын көҙ тәбиғәтенең үҙенсәлекле күренештәре менән таныша.Ике миҙгелдең тәбиғәтен сағыштырыу, айырмалыҡтарын билдәләү аша һәр миҙгелдең үҙенә генә хас күркәмлегенә баҫым яһау.

Балаларға эстетик тәрбиә биреү, уларҙа тыуған яҡтың тәбиғәтенә, туған телгә мөхәббәт тәрбиәләү- әҫәрҙе өйрәнеүҙә төп маҡсат булып тора. Тасуири һәм һайлап уҡыу күнекмәләрен нығытыу.Фәүзиә Рәхимғолова

**Тематик план**

1 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Мин укый беләм | 1 |
| 2 | Әкиәт укырға яратам | 7 |
| 3 | Атай ғаилә башлығы | 8 |
| 4 | Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр | 10 |
| 5 | Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт | 8 |
| | Бөтәһе | 34 |

2 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы | 1 |
| 2 | Уҡыйбыҙҙа ,уйнайбыҙ ҙа | 3 |
| 3 | Әкиәттәр донъяһында | 5 |
| 4 | Шиғыр укыу яттан һөйләү | 7 |
| 5 | Беҙ тәбиғәт балалары | 14 |
| 6 | Әҙәп төбө ғәҙәт | 4 |
| | Бөтәһе | 34 |

3 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Белем байрамы | 1 |
| 2 | Йәйге сәйәхәттәр һәм мажаралар | 5 |
| 3 | Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә | 7 |
| 4 | Әҙәп төбө – матур ғәҙәт | 5 |
| 5 | Тәңкә - тәңкә ҡарҙар яуа.. | 6 |
| 6 | Йортом, илем, халҡым, киләсәгем | 5 |
| 7 | Әкиәт уҡырға яратам | 2 |
| 8 | Илде иңләп йәмле яҙ килә | 3 |
| | Бөтәһе | 34 |

4 класс

| № | Тема | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы ,йәй | 1 |
| 2 | Мостай Кәрим | 2 |
| 3 | Зәйнәп Биишева | 3 |
| 4 | Динис Бүләков | 5 |
| 5 | Яныбай Хамматов | 4 |
| 6 | Абдулһаҡ Игебаев | 3 |
| 7 | Ноғман Мусин | 5 |
| 8 | Фәрит Исәнғолов | 5 |
| 9 | Кәтибә Кинйәбулатова | 2 |
| 10 | Сафуан Әлибай | 4 |
| | Бөтәһе | 34 |